# СЕРЛЕ ДОНЪЯ
# СЫҶЫ



Азат Йыһаншин ғаиләһе менән

*Өфө тамашасыһының артистарға талаптары юғары. Еңел-елпе, яһалма уйнағандар шунда уҡ һиҙелә. Шуға күрә янып, дәртләнеп ижад иткән артистар тиҙ үк күҙгә салына. М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының спектаклдәрен даими ҡараған тамашасылар йәш, әммә һәләтле, сәхнәлә үҙ манераһы булған Азат Йыһаншинға тәүҙә үк иғтибар иттеләр. Спектаклдә үҙенең шәхси яҙмышынан геройҙыҡына «күсеп», бөтөнләй онотолоп уйнай ул. Тамашасыны ышандырырлыҡ итеп башҡара, хатта ул ижад иткән кире образдарҙы ла яратып ҡарайһың. Мәҫәлән, Ш.Рәхмәтуллиндың «Ҡоштар ҙа ояһына ҡайта» әҫәре буйынса ҡуйылған спектаклдәге Зинтыҡ роле. Ҡаты бәғерле, тормошҡа асыулы образға ла Азат ниндәйҙер сафлыҡ өҫтәгәндәй, ҡасандыр ул да башҡалар кеүек йәшәгән, тип әйткәндәй.*

*Театр донъяһында «амплуа» тигән термин бар. Азаттың амплуаһын һиҙә алмағас, мин уның үҙенән һораным. Сөнки ул башҡарған образдар төрлө планлы, төрлө сифатлы. Шулай ҙа бер уртаҡ һыҙаттары бар: бөтәһендә лә тиерлек маҡсатҡа ынтылыусан, тырыш әҙәм яҙмышы. «Амплуа — дөрөҫ түгел. Артист кеше төрлө ролдәр уйнай алырға тейеш. Актерға профессиональ үҫеш өсөн гел типик образ ғына биреүҙәре һис тә дөрөҫ түгел. Был актерҙың ижади үҫешен тотҡарлай», — ти ул.*

*Азат мәктәптә уҡығанда уҡ унда үткәрелгән концерттарҙа әүҙем ҡатнашҡан. Рус мәктәбендә уҡығанлыҡтан гел русса йырлаған. Унынсы синыфты тамамлағас, тыуған Баймаҡ ҡалаһында ашнаҡсыға уҡып, бер йыл ашханала эшләй. «Минең өсөн аш-һыуҙың тәме генә түгел, эстетик биҙәлеше лә мөһим булды», — тип хәтерләй артист. Ул әле лә кәрәк ваҡытта ҡул аҫтында булған ризыҡтарҙан телеңде йоторлоҡ аш бешереп, матур итеп биҙәп тәҡдим итә белә.*

**— Бәлки, аш-һыуҙа импровизациялау серҙәрен белеүе сәхнәлә лә, ролдең серен асырға ярҙам итәлер?**

«Минеңсә, ролде асыуға иң элек ниндәйҙер эске һиҙемләү тойғоһо ярҙам итә. Сценарийҙы, пьесаны уҡығас, режиссер менән һөйләшкәндән һуң, байтаҡ уйланырға тура килә: ә быңдай кеше үҙен теге йәки был осраҡта нисек тота, ниндәй сифаттарға эйә, ниндәй хәрәкәт эшләргә мөмкин, артист шуны алдан уҡ асыҡларға тейеш. Интуиция артист өсөн бик кәрәкле сифат», — ти Азат.

**— Азат, һеҙ тән аҙығын хәстәрләгән профессияға йән рәхәтлеген биргән һөнәр — артислыҡты һайлағанһығыҙ...**

— Бер аҙ ашнаҡсы булып эшләгәндән һуң, мин шоферлыҡҡа уҡып АТП-ла эшләнем. Тап шул ваҡытта бер танышым миңә: «Азат, һинең урының бында түгел, һинең урының сәнғәттә, һин сәхнәлә уйнарға тейешһең», —



10-2001.p65 192 02.11.01, 15:35

тине. Ул минең йырлауымды, үҙешмәкәрлектә ҡатнашыуымды белә ине. Шул йылды йәй отпуск алып сәнғәт институтына юл тоттом. Унда турҙар һынауын үтергә кәрәк. I-се турҙа шиғыр уҡырға кәрәк тигәс, биш юллыҡ өҙөктө уҡыным. Имтихан алыусы: «Булдыламы ни?» — тигәс, «Эйе» — тинем. Бүтәндәр бит поэмалар уҡыйҙар. Мәҫәл уҡырға ҡушҡас, «Белмәйем», — тинем. Үҙем менән гитарамды алып килеүемде күргәс, йырлауымды һоранылар. Мин шундай ҡыуанып, ихлас, онотолоп китеп йырлай башланым. Комиссиялағы уҡытыусы: «Туҡта!» тиһә лә туҡтай алмай йырлайым. Ул аптырағас: «Стой», — тине. Мин асыуланып: «Я не люблю , когда меня останавливают», — тип әйткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Комиссия алдында тороуымды аңлағанда һуң ине инде. Ауыҙҙан сыҡҡан һүҙҙе кире индереп булмай. Ә шулай ҙа миңә 2-се турға үтеүемде хәбәр иттеләр. Уныһын уңышлы үттем. Абитуриенттың һәләте бармы-юҡмы икәнлеге күренеп тора икән. Был беренсе йыл уҡыған студенттарға ҡараһаң да һиҙелә — кем артист булам тигән балалыҡ хыялын эйәртеп йөрөй, ә кемдәлер ысынлап та артист һәләте бар. Ни тиһәң дә, күптәрҙе артист һөнәрендә дан-шөһрәт ҡыҙыҡһындыра, ымһындыра.

**— Ә был мәсьәләгә, Азат, һеҙ нисек ҡарайһығыҙ?**

— Дан, аҡса кәрәк булһа, мин эстрадаға китер инем. Унда тиҙерәк танылыу яуларға була, аҡсаһы ла күберәк һымаҡ. Минең өсөн театр — ниндәйҙер мөғжизә. Рухи донъямдың талабы.

**— Азат, күптәр һеҙҙе популяр, йәштәргә генә түгел, оло быуындарға ла оҡшаған йырҙарың аша ла беләләр. Ә ни өсөн йырсы юлын һайламай театрға киттегеҙ?**

— Дөрөҫ, тамашасыға йырҙар менән  танылһам да, мин үҙемде иң элек драма театры артисы тип хис итәм. Театр бүлеген тамамланым. Минең өсөн йыр — мауығыу ғына. Ә йырҙарға килгәндә, бер ваҡыт Урал Иҙелбаев минән: «Ә һин башҡортса йырларға уйлағаның юҡмы?», тип һораны. Мин аптырап ҡалдым. Шулай ҙа был һорау хәтергә һеңеп ҡалды. Ул ваҡытта беҙ Венер Камалов менән бер ятаҡта, бер бүлмәлә тора инек. Венер китаптар йыя, уның шәхси китапханаһы арыу уҡ. Бер көндө ҡарай торғас, китаптар араһынан Рәми Ғариповтың



*«Таһир менән Зөһрә» спектакленән күренеш*

шиғырҙар йыйынтығы күҙгә ташланды. Алып уҡырға тотондом. «Хуш бул инде» шиғырына еткәс, үҙенән-үҙе көйләй башланым. Тәүге йырым шулай тыуҙы. 1993 йылда уны Урал менән яҙҙырҙыҡ. Унан һуң Р.Ғариповтың «Әсәйемә» шиғырына йыр яҙҙым. Һуңынан «Аҡйондоҙ» төркөмө ойоштороу идеяһы тыуҙы. Ғөмүмән, Ғарипов шиғырҙары бай, тәрән йөкмәткеле. Йырҙа минең өсөн һүҙҙәре мөһим. Ғөмүмән, миңә баллада формаһындағы йырҙар яҡын. Йыр мәғәнәле булырға тейеш.

**— Сәнғәт институтында кемдең класында уҡынығыҙ?**

— Мин мәктәптә русса уҡыным. Шуға ла театр факультетының рус бүлегенә уҡырға керҙем. Беҙҙең етәксебеҙ Павел Романович Мельниченко булды. Мин яҙмышыма рәхмәтлемен шундай талантлы режиссер менән осрашыуыма. Ул эшләргә, сәхнәлә йәшәргә өйрәтте. Әлбиттә, һәр беребеҙ үҙ йөҙөн тапты. Әммә уҡытыусыбыҙҙың ролен әйтмәй китмәй булмай.

Миңә тәүҙә режиссерлыҡҡа тәҡдим иткәйнеләр. Әммә мин үҙем башта яҡшы, профессиональ актер булмай тороп, яҡшы режиссер булып булмай, тип яңылыш уйланым. Был, әлбиттә, дөрөҫ түгелдер. Режиссер булһам да уйнай алыр инем. Беҙҙең курсты Стәрлетамаҡ театрына тип әҙерләнеләр. Институттан һуң бер аҙ унда эшләнем.

**— Азат, һеҙҙең ижад биографияғыҙ кеше яҙмышы кеүек — тупһанан түргә күтәрелеүҙе хәтерләтә. Башта — Стәрлетамаҡ драма театры, унан— Йәштәр театры. Ә хәҙер һеҙ республикабыҙҙың иң**



10-2001.p65 193 02.11.01, 15:35

**абруйлы ижадханаһы — Башҡорт академия драма театрында эшләйһегеҙ. Был осраҡлы этаптармы, әллә ки яҙмыш ҡушыуылыр?**

— Әйтеп үтеүемсә, Стәрлетамаҡҡа мине институт тамамлағас ебәрҙеләр. Гөлдәр Мозафаровна Ильясованың тәүге спектаклдәрендә ролдәр әҙерләнем. Беренсе ролде «Бесталанная» спектаклендә уйнарға тура килде. Үҙенсәлекле тәжрибә мәктәбе булды ул. Әфәлә ләлә ҡалырға булыр ине, әммә мин ижад юлымды Стәрле театрында башлауыма үкенмәйем. «Аҡйондоҙ» төркөмө ойошторғас, мине егеттәр башҡалаға саҡырҙылар, бер үҙең унда йөрөмә, тип. Шулай Милли йәштәр театрына эшкә урынлаштым. Ул ваҡытта унда А.Нәҙерғолов баш режиссер ине. Ә ул М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрына күскәс, мине шунда саҡырҙы. Шулай, тәжрибә туплай-туплай, ошо коллективҡа килеп эләктем.

**— Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан, тиҙәр. Әлбиттә, үҙегеҙгә лә байтаҡ тырышлыҡ һалырға тура килгәндер.Әле ниндәй хыялдар, маҡсаттар менән йәшәйһегеҙ?**

— Әлегә мин башҡарған ролдәр күбеһенсә эпизодик характерҙа, спектаклдең йә беренсе бүлегендә, йә икенсеһендә генә күренеп ҡалам. Ә минең бөтә спектакль барышында башҡарғандай роль уйнайһым килә.

**— Азат, һеҙ әле йәш, иң-иң дәртле, эшкә ашҡынып торған мәлегеҙ. Бөтәһе лә алда әле. Шулай ҙа һорамай булдыра алмайым: айырыуса ниндәй ролде уйнар инегеҙ?**

— Гамлет ролен. Был минең өсөн яҡын образ. Салауат Юлаев образы. Әммә уны мин беҙ сәхнәләрҙән, тарихтан күрһәтелгән герой итеп түгел, ә иң элек уның шәхес, кеше, хатта малай сағын сағылдырып уйнарға теләйем. Уйлап ҡарағыҙ: батырлыҡ күрһәткәндә уға 16-18 йәш кенә булған. Ә был, уйлап ҡараһаң, малай, үҫмер генә. Эйе, ул тиҫтерҙәренә ҡарағанда үткер, көслө, яуаплылыраҡ. Әммә ул бит йәш егет булған, уның да шаярғыһы, иркәләнәһе килгәндер.

**— Бында һеҙ авторҙарға яңы пьеса яҙырға тема бар, тимәксеһегеҙме?**

— Юҡ, улай тимәйем. Мостай Кәримдән дә яҡшыраҡ яҙыусы табылырмы икән?! Уның «Салауат» драмаһын икенсе күҙлектән сәхнәгә ҡуйырға, Салауат образын башҡаса уйнарға була.

**— Тимәк Салауат хаҡындағы драматургияла асылмаған табыштар бар әле?**

— Бар. (Йыһаншин «Салауат» спектаклендә башҡарған образы өсөн Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты).

**— Азат, ә шулай ҙа дилемма булһа — һеҙгә эстрада йә театрҙы һайларға ҡушһалар, ни эйтер инегеҙ?**

— Бер һүҙһеҙ театрҙы һайлар инем. Әгәр мин үҙ мөмкинселектәремдең сигенә еткән булһам һәм театр сәхнәһендә уйнарлыҡ дарманым бөтһә, эстрада йырсыһы булып китер инем. Әммә мин әле театр ижадына мөкиббән ғашиҡмын, уйнағым килә һәм уйнай алам тип уйлайым. Театр — үҙе бер сихри донъя бит. Бында эләкһәң, тиҙ генә китеп булмай.

**— Һеҙ сәхнәгә сыҡҡанда тулҡынланаһығыҙмы?**

— Спектаклдә ниндәйҙер тәнде зымырҙатҡандай, ток үткәндәй тулҡынланыу кисермәһәм, исем өсөн генә уйнап сыҡһам, үҙем менән ҡәнәғәт булмайым.

**— Һәр артистың да кумиры була...**

— Миңә Олег Янковскийҙың ижады, уйнауы оҡшай.

**— Янковский — ҡатын-ҡыҙҙарҙың күңелен яулаған актер. Һеҙҙең мөхәббәткә, ғашиҡ булған ир-зат роленә ҡарашығыҙ нисек?**

— Өлкән тамашасылар ҡараған спектаклдәрҙәге ғашиҡ егеттәрҙе мин уйнай алмаҫ инем.

**— Был нилектән шулай?**

— Сөнки миңә һәм беҙҙең быуын йәштәренә ҡәтғи, етди, тыйнаҡ тойғолар хас. Минең үҙемдең, мәҫәлән, мөхәббәттән башын юғалтҡан геройҙарға иҫем китмәй.

**— Азат, тамашасылар исеменән ижад уңыштары, үҙегеҙ теләгән ролдәр, матур тамашалар, күңелгә ятышлы йырҙар теләйем.**

«Артистың ижады хаҡында тулыраҡ яҙыр өсөн ул уйнаған спектаклдәрҙе даими ҡарап, эске донъяһын аңлар өсөн йышыраҡ һөйләшеп тороу кәрәк», — тине хушлашҡанда Азат Ололарса. Театр һөйөүселәр һәләтле артистың теләген хуплар тигән өмөт бар. Киләсәктә уның Ш.Бабич премияһына өр-яңы премиялар өҫтәлер, тип уйларға ныҡлы нигеҙ тойомлана.

*Гүзәл Әҙһәмова әңгәмәләште.*



10-2001.p65 194 02.11.01, 15:35